*Илдус БУЛӘКОВ,*
*БДУ-ның Сибай институты*
*педагогия факультеты деканы, профессор*



# ИЛГӘ ИҢ ТЕРӘП...



Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында бөгөнгө көндә 14 специальность буйынса белем биреүсе дүрт — педагогия, тәбиғәт-техник, иҡтисад һәм хоҡуҡ, тарих-филология факультеттары эшләп килә. Уның көндөҙгө һәм ситтән тороп уҡыу бүлектәрендә 4 меңдән ашыу талип белем ала. Институт хәҙер үҙаллы юғары уҡыу йорто хоҡуҡтарын алыу дәрәжәһенә лә яҡынлашты инде. Бөгөнгө һүҙебеҙ иһә ошо институттың ойошторолоуында тәүге аҙымдарҙы яһаған, уның нигеҙен һалыуҙа һәм үҫтереүҙә беренсе булып эш башланған педагогия факультеты хаҡында барыр.

Илдә һәм республикабыҙҙа 90-сы йылдарҙа барған үҙгәрештәр дәүере, үҙаллылыҡ яулау өсөн хәрәкәт башланғанға тиклем үк Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш төбәге халҡы, бөтә йәмәғәтселек ошо яҡтағы 8 район (Учалы, Белорет, Әбйәлил, Бөрйән, Баймаҡ, Йылайыр, Хәйбулла, Ейәнсура) һәм 5 ҡала (Учалы, Белорет, Баймаҡ, Сибай, һуңыраҡ — Межгорье) уҡыусылары өсөн яҡында төрлө профилле юғары уҡыу йорто булдырыу кәрәклеге тураһында һүҙ йөрөтә килде. Ниһайәт, 1990 йылда был теләк-һүҙ тормошҡа ашырыла башланы: республиканың юғары дәүләт органдары шул йылдың көҙөнә Сибай ҡалаһында юғары уҡыу йортон асыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Был ҡарарҙы тормошҡа ашырыуға әҙерлек эше Өфөләге Башҡорт дәүләт педагогия институтына һәм уның ректоры профессор Эдуард Шәйхулла улы Хәмитовҡа йөкмәтелә. Институттың Ғилми советы 1989 йылдың октябрендә Сибайҙа юғары уҡыу йорто асыуға мохтажлыҡты, уның матди-техник базаһын булдырыу, биналар, йыһаздар менән тәьмин итеү мөмкинлеген асыҡлау, бар әҙерлекте нигеҙләү өсөн махсус комиссия төҙөй һәм ул ошо мәсьәләне региондағы һәр район, ҡала етәкселеге, мәғариф ойошмалары, урындағы халыҡ вәкилдәре менән берлектә ентекле өйрәнә, Сибай ҡала хакимиәте менән бергә бар мөмкинлектәрҙе барлай. 1990 йылдың 1 сентябрендә иһә Сибайҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтының педагогия факультеты тәүге уҡыу йылын башлап ебәрә. Факультеттың беренсе деканы итеп уны ойоштороуға ҙур көс һалған тарих фәндәре кандидаты Рауил Зыя улы Сәлиев тәғәйенләнә.

Факультет тәүге йылдарҙа “Мәктәпкәсә йәштәге балалар тәрбиәһе һәм психология”, “Педагогика һәм башланғыс белем биреү методикаһы” бүлексәләренән тороп, уҡытыу дүрт йыллыҡ программа буйынса алып барыла ине (һуңғараҡ улар биш йыллыҡ уҡыу программаһына күсерелде).

Беренсе уҡыу йылында мәктәпкәсә тәрбиә һәм психология бүлегенә — 25, башҡорт һәм рус төркөмдәре булған педагогика һәм башланғыс белем биреү методикаһы бүлегенә 50 талип ҡабул ителгәйне.



*Педагогия кафедраһы мөдире профессор Ф.Сәйфуллин*

Уҡыу-уҡытыу эштәре менән факультет деканы аша Өфөләге институт етәкселек итә.

Уҡыуҙар башта хәҙерге педколледжда һәм Пионерҙар йортонда, шул осорҙа тарҡатылған партияның ҡала комитеты бушатҡан бинаның тамаша залында алып барыла, талиптар иһә Башҡортостан баҡыр-көкөрт комбинаты эшселәренең әүәлге ятаҡтарында урынлаштырыла. Сибай ҡала хакимиәте етәксеһе Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов был мәлдә студенттар өсөн бөтә уңайлыҡтары булған, айырым секцияларға бүленгән яңы типтағы биш ҡатлы ҙур ятаҡхананы төҙөп бөтөрөүҙә һәм балаларҙы беренсе синыфтан аҙағынаса башҡортса уҡытыуҙы күҙ уңында тотҡан ун өсөнсө һанлы урта мәктәп бинаһын, әле асылған яңы факультетты ла ваҡытлыса шунда күсереп торорға ниәтләп, сафҡа индереүҙе йәһәтләй. Бер үк ваҡытта педагогия факультетының Белов урамындағы айырым уҡыу-уҡытыу бинаһын проектлау эше лә башлана. Ойоштороу эштәрен башҡарыуҙа, Сибай ҡала хакимиәте етәкселәренән тыш, педагогия училищеһының ул саҡтағы директоры (хәҙер Сибай институтында асылған технология һәм эшҡыуарлыҡ бүлегенең мөдире) Хөснөтдин Хәйбулла улы Хәмитов ҙур тырышлыҡ күрһәтә, ваҡытлыса факультет деканы вазифаһын да башҡара. Дәреслектәр менән Стәрлетамаҡ, Магнитогорск педагогия институттары, Зәки Вәлиди исемендәге республика китапханаһы, Сибай ҡала хакимиәте тәьмин итешә, Баймаҡ районының “Һәүәнәк” совхозы (ул саҡтағы директоры — Илшат Хәмит улы Ситдиҡов) факультеттың иң яҡын ярҙамсыһы булып китә, Сибай ҡалаһының барлыҡ мәктәптәре, педагогия һәм медицина училищелары, тау техникумы, бөтә хужалыҡтары һәм ойошмалары, регондың һәр ҡалаһы, районы, бар халҡы яңы асылған юғары уҡыу йортона хәленсә теләктәшлек һәм ярҙам күрһәтә.

Факультеттың тәүге дәрестәрен Р.З.Сәлиев, В.И.Хажин, Х.Б.Нурғәлина, З.Р.Хәлимова, И.Н.Семенова һ.б. үткәрә. Тәжрибәле педагогтарҙы, ғилми дәрәжәле фән эшмәкәрҙәрен яңы уҡыу йортона эшкә йәлеп итеү киң йүнәлештә алып барыла. Юғиһә, факультеттың беренсе уҡыу йылындағы төп штатында унлап ҡына уҡытыусы иҫәптә тороп, шуларҙың өсөһө генә ғилми дәрәжәле була. Икенсе уҡыу йылында уҡытыусылар һаны ла арта. Фән докторы, профессор Ғ.Ш. Илишев, фән кандидаттары С.Ғ. Сөләймәнова, А.Я.Канапацкий, З.З.Әбсәләмов, У.С.Вилданов, С.И. Йәнтурин, З.З.Сөләймәнова факультеттың абруйын күтәрешәләр. Ошо белгестәр тырышлығы менән педагогия һәм психология (мөдире — А.Я.Канапацкий), дөйөм белем фәндәре (У.С.Вилданов) кафедралары ойошторола, сит телдәр, физик тәрбиә һәм спорт, биофизиология буйынса уҡытыу төркөмдәре (етәкселәре — Р.Ғ.Закирова, В.И.Щемелинин, С.И.Йәнтурин) туплана, шәхси иҫәп-хисап нигеҙендә ситтән тороп уҡыу бүлеге ойошторола (етәксеһе — Х.Б.Нурғәлина). Түңәрәктәр, КВН командаһы эш башлай.

Педагогия факультетының ойошоуы һәм үҫешендә 1993 йылда йәнә бер мөһим аҙым яһалды — уның нигеҙендә Башҡорт дәүләт педагогия институтының Сибай

филиалы үҫеп сыҡты. Уның беренсе директоры итеп педагогия фәндәре кандидаты Вәкил Исмәғил улы Хажин тәғәйенләнде.

Шул уҡ йылда филиалда специальность һаны арттырылды: башланғыс синыф уҡытыусылары һәм мәктәпкәсә йәштәге балалар тәрбиәсеһе әҙерләү төркөмдәренә өҫтәп, биология һәм география, биология һәм физик тәрбиә, музыка бүлектәре асылды. Уҡытыу методикаһы, биология кафедралары һәм музыка уҡытыусылары төркөмө (мөдирҙәре — фән кандидаттары, доценттар З.З.Әбсәләмов, С.И.Йәнтурин һәм өлкән уҡытыусы Ә.С. Зиннурова) өҫтәлде. Өфөнән аспирантура һәм ғилми академия әҙерлеге үткән фән кандидаттары Ғ.М. һәм И.К.Бүләковтар (филология), Ә.Ғ.Заеров (медицина), В.М.Шәрәфетдинов (химия), Р.Й.Муллағолов (биология), А.Ф.Хөсәйенов (биология), Й.Т.Һөйөндөков (ауыл хужалығы), Ф.Ә.Сәйфуллин (педагогия) һ.б. Сибайға күсеп килеп, яңы филиал уҡытыусыларының мөмкинлектәрен күпкә арттырҙы һәм нығытты. Иҡтисад фәндәре кандидаты З.З.Сөләймәнова Сибай филиалының деканы булды.

Ошо уҡ 1993 йылда Сибайҙа Башҡорт дәүләт университетының хоҡуҡ факультеты асылды, киләһе йылына уға иҡтисад-хоҡуҡ бүлеге лә өҫтәлде һәм БДУ-ның Сибай филиалы ойошторолдо. Республика, Сибай ҡалаһы, Баймаҡ районы етәкселеге ошо ике юғары уҡыу йортоноң филиалдарына ҙур матди-техник һәм аҡсалата ярҙам күрһәтте: талиптарға — күркәм ятаҡ, уҡытыусыларға коттедждар төҙөттө, яҡшы фатирҙар бүлде. Райондар ҙа ҙур матди ярҙам күрһәтте.

1994 йыл яңы уҡытыу йортона йәнә бер ҙур кинәнес кисерергә насип итте: ошо йылда был юғары уҡыу йорто үҙенең тәүге 72 йәш белгесен үҙаллы хеҙмәт юлына сығарҙы.

Йәш уҡытыусыларға диплом тапшырыу тантанаһы ҡаланың Мәҙәниәт һарайында регион кимәлендә үткәрелеп, унда районда рҙан етәкселек вәкилдәре, ата-әсәләр, мәктәп уҡытыусылары һәм уҡыусылар, студенттар ҙур күтәренкелек менән ҡатнашты. Был ваҡиға Башҡорт дәүләт педагогия институты Сибай филиалының исемен һәм абруйын тирә-яҡҡа танытты. Бында уҡырға килергә теләүселәр һаны йылдан-йыл арта барҙы: абитуриенттар регионда ғы 8 район һәм 5 ҡаланан тыш, Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ, Кваркенский, Һарыҡташ райондарынан һәм Гай, Орск ҡалаларынан, Силәбе өлкәһе Арғаяш, Ҡыҙыл, Брединский райондарынан йыл да күпләп килә, Хакасиянан, Татарстандан уҡып йөрөүселәр бар, республиканың Мәләүез, Ишембай, Күгәрсен райондарынан сыҡҡан студенттар ҙа күренә, Салауат ҡалаһынан, Ҡыйғы, Балаҡатай, Ғафури райондарынан килеп уҡып сыҡҡандар ҙа булды. Педагогия факультеты ун ике йыллыҡ эшмәкәрлеге осоронда көндәҙгө бүлектән үҙенең туғыҙынсы

*Башҡорт филологияһы кафедраһы мөдире доцент Ғ.Бүләкова*



сығарылыш йәш белгестәрен эшкә оҙатты. Бында әҙерләп сығарылған 684 кешенең 201-е — педагогия һәм мәктәпкәсә йәштәге балалар психологияһы, 415-е — педагогия һәм башланғыс белем биреү методикаһы, 68-е музыка белеме бүлектәрен тамамлап сыҡты, шуларҙың 69-ы маҡтаулы ҡыҙыл дипломға лайыҡ булды.

Факультетты тәүге осорҙа тамамлап сыҡҡандарҙан Зөлфиә Мәхмүтова, Рида Латипова, Гүзәл Шәрипова (хәҙер Вилданова), Гөлнәзирә Йәнтурина (хәҙер Байғолова), Гөлйөҙөм Сабитова бөгөн шул уҡ факультетта үҙҙәре студенттарға белем бирә.

Шулай итеп, 1993 йылдан алып ҙур уҡ булмаған Сибай ҡалаһында Өфөләге ике юғары уҡыу йортоноң филиалдары айырым эшләп килде һәм улар ярайһы уҡ киң үҫеш алды, күп тармаҡлыға әйләнә барҙы. Бер үк ҡалала ике филиалды тотоу һәм тәьмин итеү йылдан-йыл ҡатмарлаша барҙы. Шуға ла 1998 йылда Сибайҙа әлеге ике филиал нигеҙендә Башҡорт дәүләт университетының институтын (филиал кимәлендә) булдырыу хаҡында ҡарар сығарылды. Яңы статус буйынса ойоштороу эштәрен ике әүәлге филиал директорҙары Ирек Сабир улы Сабиров менән Йәлил Төхвәт улы Һөйөндөков (ул ауыл хужалығы фәндәре докторы булып етеште) тырыш һәм тиҙ арала башҡарҙы.

1998—99 уҡыу йылын элекке ике филиал Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты исеме менән башлап ебәрҙе. Ҡала хакимиәте уның ҡарамағына, элеккеләренә өҫтәп, “Баласаҡ” балалар баҡсаһын, “Строитель” клубы менән йәш эшсе ғаиләләре ятаҡханаһын, Киров урамындағы ике бинаны, БИРО-ның Сибай филиалы корпусын, агро-биостанция итеп файҙаланыуға ер бирҙе.

БДУ-ның Сибай институты 1999—2000 уҡыу йылын яңы директор — техник фәндәр кандидаты Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов етәкселегендә башлап ебәрҙе. Тәүге директор И.С.Сабиров Башҡортостан Фәндәр академияһының яңы асылған Сибай бүлексәһен ойоштороу эшенә күсте. Ҡала менән етәкселек итеүҙән бында күсер алдынан З.Ғ.Йәрмөхәмәтов, тәүәккәллек күрһәтеп, институт уҡытыусыларына яңы файҙаланыуға тапшырылған йорттан өс тиҫтәгә яҡын фатир биреүгә өлгәште. Артабан иһә директор төп иғтибарын институттың матди-техник базаһын нығытыуға, бөтә төр эшмәкәрлекте тәртипкә һалыуға, уҡытыусылар менән хеҙмәткәрҙәр араһында һәр кемдең үҙ бурысын теүәл үтәүҙәге яуаплылығын күтәреүгә, уҡыу йортоноң тышҡы һәм эске йөҙөн яҡшыртыуға, абруйын нығытыуға йүнәлтте. Уҡыу-уҡытыу әсбаптары туплауға, уҡытыусылар һәм хеҙмәткәрҙәрҙең һаулығын һаҡлауға, ялын файҙалы ойоштороуға, уҡыу-уҡытыуҙы компьютер һ.б. техника менән байытыуға, дөйөм хеҙмәт һәм уҡыу-уҡытыу тәртибе кимәлен күтәреүгә иғтибар артты, әхлаҡи-этик мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу йүнәлешендәге тәрбиә эше йәнләндерелде, яңынан-яңы бүлектәр асыла торҙо.

Педагогия факультеты, башҡорт теленең дәүләт теле статусы алыуын күҙ уңында тотоп, 2000—2001 уҡыу йылын яңы, бишенсе бүлеген асыу — башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса белгестәр әҙерләргә тотоноу, башҡорт филологияһы кафедраһын (мөдире — филология фәндәре кандидаты, доцент Ғәзилә Мөҙәрис ҡыҙы Бүләкова) ойоштороу менән башлап ебәрҙе. Унда 25 студент ҡабул итергә тейеш булһаҡ, инергә теләүселәр һаны 125-кә етте. Уҡырға теләге ҙур булған абитуриенттарҙың ҡалғандарынан түләп уҡыусылар төркөмө ойошто.

Факультеттың биш бүлегендә әлеге көндә 460 талип белем ала, уларҙы 34 штаттағы һәм 18 ситтән саҡырылған белгес һөнәр нескәлектәренә өйрәтә. Уҡытыусыларыбыҙҙың 13-е фән кандидаты (шуларҙан 4-һе профессор, 8-е доцент, 11-е өлкән уҡытыусы, 11-е ассистент). Ғилми дәрәжәһеҙ 21 уҡытыусыбыҙҙың 15-е аспирантура йәки билдәле ғалимдар етәкселегендә

диссертация яҙыу аша үҙ белемен, һөнәр кимәлен күтәреү өҫтөндә эшләй, 2 уҡытыусы докторлыҡ диссертацияһын яҡлауға әҙер.

Факультетты төрлө йылдарҙа тамамлап сыҡҡан белгестәр хәҙер регионлағы халҡыбыҙ араһында, мәктәптәрҙә һәм балаларҙы тәрбиәләү өлкәһендә ярайһы уҡ киң билдәлелек, танылыу ала килә. Ә инде педагогия факультетының "Педагогика һәм башланғыс белем биреү методикаһы" һөнәренә өҫтәлмә рәүештә музыка буйынса махсуслашыу бүлеген 1998 йылда тамамлаған һәм Сибай ҡалаһының интернат-гимназияһында уҡытҡан Зөлфиә Сабирйән ҡыҙы Әбйәлилова "Башҡортостандың 2002 йыл уҡытыусыһы" республика конкурсында еңеп сыҡты һәм Гран-при (аҡсалата бүләк һәм "Мәғариф алдынғыһы" билдәһе) яулап алды.

«Музыка белеме» бүлегенең 2-се курс студентҡаһы Дауытова Айгөл менән 3-сө курс студентҡаһы Сәйетғәлина Айгөл 2001 йылда Чебоксар ҡалаһында ойошторолған музыкант студенттарҙың бөтә Рәсәй конкурсында фортепьянола уйнау буйынса призлы урын һәм лауреат исеме алып ҡайттылар. Айгөл Сәйетғәлина иһә быйыл да пианистарҙың Украинала үткәрелгән конкурсында лауреат булды.

Факультет уҡытыусыларының да оҫталығы йылдан-йыл камиллаша, үҫә бара. Институт буйынса үткәрелгән "2002 йылдың иң яҡшы уҡытыусыһы" конкурсында, мәҫәлән, педагогия факультетының психология уҡытыусыһы Зинфира Кинйәбулатовна Дәүләтбаева, өлгөлө дәрес күрһәтеп, беренсе урынды яуланы һәм кер йыуыу машинаһы менән бүләкләнде, ә педагогика уҡытыусыһы Гөлнәзирә Байғолова дәресте күҙәтеүселәр һөйөүенә лайыҡ булды.

Педагогия факультетының студенттары, төп һөнәрҙәре буйынса дәрестәрҙән тыш, институт тормошонда ла үҙҙәрен тырыш йәмәғәтселәр итеп таныта киләләр. Театр үҙешмәкәрлеге, халыҡ бейеүҙәрен үҙләштереүсе "Ете ырыу" ансамбле, тынлы оркестр, вокаль-инструменталь, халыҡтың музыка уйын ҡоралдары ансамбле түңәрәктәрендә, КВН, "Экватор", "Студент яҙы", күренекле шәхестәр менән осрашыу кеүек сараларҙа улар әүҙем ҡатнаша.

Факультеттың бөгөн "Педагогика һәм башланғыс белем биреү методикаһы", "Музыка белеме", "Педагогика һәм психология" һөнәрҙәре буйынса белгестәр әҙерләүе ситтән тороп уҡыу рәүешендә лә алып барыла. Үткән уҡыу йылында уларға башҡорт теле һәм әҙәбиәте төркөмө лә өҫтәлде. Ошо уҡ һөнәрҙәге уҡытыусыларҙы әҙерләүҙең ситтән тороп уҡыу бүлеге, Силәбе һәм Ҡурған өлкәһе башҡорттары өсөн тәғәйенләнеп, Арғаяш районы үҙәгендә Башҡорт дәүләт университетының 2000 йылда көҙ асылған махсус вәкиллегендә лә үҙ эшен уңышлы дауам итә. Ул яҡтарҙағы туғандаштарыбыҙҙың милли мәнфәғәтен ҡайғыртыу, тарихи үҙаңын күтәреү йәһәтенән дә был аҙым мөһим әһәмиәткә эйә булыр, моғайын.

Шулай итеп, республикабыҙҙың көнсығыш регионындағы халҡы, районлар һәм ҡалалар етәкселеге, бөтә йәмәғәтселек теләге һәм яҡындан күрһәткән матди, рухи ярҙам нигеҙендә, Башҡортостан Республикаһы үҙенең үҙаллылығын яулауға тәүге аҙымдарын яһаған көндәрҙә, суверенитетыбыҙҙың тиңдәше һәм емеше булараҡ асылған БДУ-ның Сибай институтындағы беренсе факультет ойошоу һәм аяҡҡа баҫыу дәүерен үтеү өҫтөндә.

Көнсығыш илдәре халҡының, бөтә донъя ҡәүемдәренең тарихын, мәҙәниәтен, аң-тормош үҫешен, мифологияһын, төрки телле ҡәрҙәштәребеҙҙең тарихи төпкөлдән хәҙергәсә булған асылын, киләсәккә ынтылышты тәрән билдәләгән кимәлдәге, алдынғы ғалимдар ярҙамында белемен киләсәк быуынға еткерә алыр уҡытыусылар һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәрен әҙерләү Сибай институты педагогия факультеты уҡытыусыларының алдағы йылдар бурысы булып ҡала. Шуға ышаныс менән ул йәшәйешенең икенсе тиҫтә йыллығына аяҡ баҫты.